**22 октябрь 2016 йыл**

**Математика**

**Тема. Предметтарҙы оҙонлоҡ буйынса сағыштырыу.**

Таратылған биттәге бирелгән эште эшләп, буяп, дәфтәргә йәбештерергә.

Төрлө төҫтәге һәм оҙонлоҡтағы 5 ҡәләм төшөрөргә. Һуңғы ҡәләм зәңгәр төҫтә, урталағыһы – иң ҡыҫҡа, икенсеһе иң оҙоно булһын.

**Тирә – яғыбыҙҙағы донъя**

**Тема.Үҫемлектәр.**

Таратылған биттәге эштәрҙе буятырға.

График диктантты юл бөткәнсе эшләргә, буятырға.

**Шиғырҙы ятла**:

Көҙгө урман
Көҙгө урман. Ағастарҙан

Алтын япраҡ ҡойола.
Зәңгәр күктән парашюттар
Төшкән кеүек тойола.

**Бел**: ҡайын, имән, шыршы, ҡарағай, саған, йүкә, уҫаҡ.

**Технология**

**Тема. Пластилин менән әүәләү.**

Киләһе дәрескә төҫлө картон, пластилин, өҫтәлгә йәйергә клеёнка, ҡулдарҙы һөртөргә салфетка алып килергә.

**Телмәр үҫтереү**

**Тема.Минең ғаиләм. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.**

1.Тема буйынса һөйләшеү ҡорорға,ғаилә тураһында һөйләргә әҙерләнергә (атай-әсәйҙең исемдәрен,ҡайҙа эшләгәндәрен һ.б.)

2.Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе табырға. (матур,ҡыҙыл,бейек,нәҙек,оҙон һ.б.)

3.Шиғырҙы ятларға:Иң яҡшы кеше-
Минең атайым,
Исемен ҙурлап,
Наҙлап атайым.
Иң көслө кеше-
Ул бит,ул ғына.
Оҡшатып уға
Атлайым бына.

**Хөрмәтле ата- әсәләр! Киләһе дәрестәр 29 октябрь 11.30 сәғәттә башлана, 14.00 сәғәттә тамамлана. Балаларҙың исемдәрен яҙып, тағырға! Баланың тыуыу тураһындағы таныҡлығының күсермәһен килтерергә. (Копия свидетельства о рождении ребенка).**